BN_65_7_04_15_2_Макет 1 06.04.2015 16:34 Страница 1

ИҖТИМАҒИ МӨНБӘР

Греция маҡсатына өлгәшерме?

Ирандың уран байытыуы мәсьәләһе буйынса уртаҡ фекергә килеү, Грециялың Европа советынан сығыу менән янауы уҙған аҙна ваҡиғалары арағында иҡтибар үҙәгендә булды.

Иранға – уран, алмашҡа – газ һәм нефть

Ирандың уран байытыуы мәсьәләһе донъяның иң йоғонтоло алты иле – Рәсәй, АҠШ, Ҡытай, Франция, Германия һәм Бөйөк Британия – ҡатнашлығында тикшерелә килеп, яҡынса килешеүҙәр аша ныҡытылып ҡуйҙы. Төп документ 30 июнгә тиклем тормошҡа ашырылырға тейеш.

Килешеүҙәр нигеҙендә Иран артабан да уран байытасаҡ. Тик ядро ҡоралы етештереү сығанағын үҙе генә файҙаланмайынса, сит илдәргә һатырға тейеш булып сыға. Әлеге шарт менән барлыҡ илдәр ҙә риза тип әйтеп булмай. Мәҫәлән, Израилдең премьер-министры Биньямин Нетаньяху быны үҙ төбәге өсөн ҙур хәүеф сығанағы буласағын белдерҙе һәм килешеүҙе аҙағынаса алып барып еткермәүҙе һораны. Сәғүд Ғәрәбстаны короле лә ошондайыраҡ фекерҙә. Был ике ил Яҡын Көнсығышта Ирандың көсәйеп китеүенән ҡурҡа. Ә Япония, Һиндостан, Австрия, Төркиә, Испания кеүек дәүләттәр әлеге алтауҙың килешеү шарты менән ҡәнәғәт булыуын белдерә. АҠШ президенты Барак Обама иһә был ваҡиғаны “ғүмерҙә бер генә була торған хәл” тип баһаланы. Рәсми Вашингтон Ирандың уран байытыу хоҡуғын таный. Ә Израиль АҠШ-тың ошондай ҡарашта тороуын өнәп еткермәй. Йәнәһе лә аралашсы булған алты ил Иранға ядро ҡоралы дилбегәһен үҙ теләгә менән тоттороп ҡуя. Был һис тә улай түгел. Уран байытыу мәсьәләһе бынан ары ла халыҡ-ара күҙәтселәр контролендә буласаҡ бит, Израиль шуны онотоп ебәрә.

Ошондай шарттарҙа АҠШ һәм Көнбайыш Европа илдәре Иранға ҡарата иғлан иткән санкцияларын бөтөрөргә тейеш булып сыға. Бының иһә Рәсәйгә кире яҡтан тәьсир итеүе ихтимал. Билдәле булыуынса, Иран – углеводород сеймалына бик бай ил (донъялағы газ запасының – 16, нефттең 10 проценты тупланған) һәм шуны һатыу иҫәбенә көн күрә. Ил бюджетының 45 проценты газ һәм нефть һатыуҙан тулылана. Санкциялар бөтөрәлгән осраҡта Рәсәйҙең йәнә бер көнөркәше барлыҡҡа киләсәк тигән һүҙ. Әле Иран газ һәм нефтте башлыса Ҡытай, Һиндостан, Япония кеүек илдәргә сағыштырмаса осһоҙ хаҡҡа һата. Санкциялар бөтөрәлһә, Европаға юл асыласаҡ. Иран президенты Хәсән Раухани белдереүенсә, яҡын киләсәктә сит ил баҙарына сығыу өсөн кеүәтле газ уҡтәргестәр һуҙыу планлаштырыла. Тик бының өсөн төбәктә һиллек хөкөм һөрөү шарт. Ә бөгөн Яҡын Көнсығышта тыныс түгел. Йәмәнде ошо төбәктәге Сәғүд Ғәрәбстаны, Кувейт, Бахрейн, Катар, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Судан, Мысыр кеүек илдәр төрлө яклап ҡыҫымға алды. Иран иһә – был ерҙә Йәмәндең берҙән-бер союздашы. Шуға ла бөгөнгө шарттарҙа уның уран байытыу мәсьәләһендә килешеүгә өлгәшеүе ҙур еңеү булып тора. Иран нисәмә йылдарға һуҙылған проблемаһын ыңғай хәл итте, хәҙер Йәмәнгә ярҙамға ашығыуы бар.

Ике ут араһында

Грецияға яңы власть килгәндән һуң был илдә көсөргәнеш артты. Элекке етәкселек Европа советы менән берлектә эшләһә, әлеге премьер-министр Алексис Ципрас ЕС-тан бойондороҡһоҙ идара итеү хоҡуғын алырға ынтыла. Ләкин маҡсатын тормошҡа ашыра алмай.

Мәғлүм булыуынса, Греция нисәмә йыл инде иҡтисади көрсөк кисерә. Бюджет сығымдарының ҡыҫҡартырын ҡыҫҡартып бөттөләр, Халыҡ-ара валюта фондынан аҡса ла алып торҙолар, тик ил үҫешеп китә алмай. Етмәһә, бурыстарҙы түләү ваҡыты етте, ә ил ҡаҙнаһы буш. ЕС һаман ҡыҫҡартыуҙы, социаль түләүҙәрҙе ҡыҫыуҙы талап итә. Алексис Ципрас иһә, һайлау алдынан биргән вәғәҙәләрен иҫләпмә, был аҙымға барыуҙан икеләнеберәк тора, ул ике ут араһында ҡалды. Бер яҡта – Европа советы, икенсе яҡта – яҡшы тормош өмөт иткән халыҡ.

Греция Хөкүмәте ярҙам һорап беҙҙең илгә мөрәжәғәт итмәксе. Иртәгә Алексис Ципрастың Мәскәүгә килеүе көтөлә. Ә 9 апрелдә Греция кредиторҙарға 450 миллион евро бурысын ҡайтарырға тейеш. 1 майға тағы ла 200 миллион евро түләү ҡаралған. Ҡаҙнаһы буш булғанлыҡтан, Греция был хәтлем аҡсаны ҡайҙан табырға белмәй. Шуға ла Ципрас Владимир Путиндан ярҙам һорамаҡсы. Рәсәйҙең финанс министры Антон Силуанов белдереүенсә, илебеҙҙең Грецияға аҡсалата ярҙам итерлек мөмкинлеге бар. Европа союзы иһә беҙҙең мөнәсәбәттәрҙең ошолай яҡшырыуын һис тә теләмәй. Шул уҡ ваҡытта Грецияла дефолт була ҡалһа, был ЕС-тың иҡтисадында ла сағылыш табасаҡ.

Шарттарҙан файҙаланып, Рәсәй Европа союзы берҙәмлегенә шына ҡаға ала. Илебеҙ Грецияға аҡсалата ярҙам күрһәтә ҡалһа, рәсми Афина Брюссель менән араны өҙәсәк, ЕС ағзалығынан сығасаҡ тигән һүҙ. Греция халҡы Европа союзы барлыҡҡа килгәнгә тиклем күпкә етешерәк йәшәгәнлектән, Алексис Ципрастың фекере менән күпселек килешер тип көтөлә. Брюссель иһә Грециялың союздан сығырға ынтылышын “таркалыуға табан тәүге аҙым” тип иҫәпләй.

Греция илебеҙҙән аҡсалата ярҙам алыуға өлгөшһә, иҡтисади санкциялар ҙа йомшартыласаҡ, әлбиттә. АҠШ һәм Көнбайыш Европа илдәре әлегә быны һис кенә лә теләмәй.

Самат ҒӘЛИУЛЛИН.

Оҫталарға еңеү йылмая

(Башы 1-се биттә).

– Ошондай мөһим сараны юғары кимәлдә ойоштороғандары өсөн республиканың Мәғариф министрлығына, Мәғарифты үҫтереү институтына рәхмәтемде белдерәм. Белем биреү системаһының ҡайһы бер өлгөләрен һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә лә әүҙем ҡулланып булалыр, минеңсә, – тип бәйән итте Дәүләт Думаһы депутаты, медицина фәндәре докторы Сәлиә Мырҙабаева. “Һөнәргә тоғролоҡ” номинацияһында еңеүгә өлгәшкәндәрҙе бүләкләгәндә лә иң изге теләктәрен еткерҙе ул. Дәүләт Думаһы депутаты Рөстәм Ишмөхәмәтов иһә “Педагогик өмөт” тип баһаланғандарҙы тәбрикләп кенә ҡалманы, Стәрлетамаҡ районынан Раушания Луговаяны, Учалы районынан Лилиә Рәхмәтуллинаны үҙенең махсус аҡсалата призы менән бүләкләне. Дәрестә заманса технологияларҙы һөҙөмтәле ҡулланыу оҫталығы юғары билдәләнгән остаздар республиканың Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Рәмил Мәжитов ҡулынан бүләк алып һөйөндө. Рәмил Ғиниәт улы үҙ сығышында Башҡортостандағы белем биреү системаһының таланттарға бай булыуын, “Йыл уҡытыусыһы-2015“ бәйгеһенең һәр көнө уңышлы үтеүен, мәғариф күгендә яңы исемдәр ҡабыныуын телгә алды. Дүрт уҡытыусы “Башҡортостан халыҡтарының мәҙәни йолаларын, илһөйәрлекте һаҡлаған өсөн” номинацияһында билдәләнде, уларҙы БДУ-ның филология факультеты деканы, педагогия фәндәре кандидаты Әлмира Ямалетдинова шиғри юлдар аша тәбрикләне.

Бәйге барышында башҡа махсус приздарға лайыҡ остаздар ҙа булды. Шуларҙың береһе – Йылайыр районынан Фәрит Фазылов. Уға М. Аҡмулла исемендәге БДПУ булдырған В. Сухомлинский миҙалын университеттың ғилми эштәр буйынса проректоры Алмаз Мостаев тапшырҙы.

Йәш уҡытыусылар – Әбйәлил районынан Айгөл Бәшәрова, Сибай ҡалаһынан Айгөл Сәлихова – уҡытыуҙа башҡорт халҡының телен, тарихын, мәҙәниәтен пропагандалаған өсөн Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының бүләгенә эйә булды. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев та туған тел уҡытыусыларын шиғри тулҡындарҙа тәбрикләне, милли әҫәрҙәрҙе уҡыусыларға өйрәткәне, ҡыҙыҡһыныу уятҡаны өсөн ҙур рәхмәтен белдерҙе.

Татар һәм урыҫ телдәре буйынса йыл уҡытыусыларын сәхнәнән мәғариф министры Әлфис Ғаязов иғлан итте. Улар – Өфө ҡалаһынан Зәбирә Риянова һәм Хәйбулла районынан Гөлнара Мәмбәтова.

– Бәйгеләр 2005 йылда ла ҡатнашып ҡарағайным, әммә еңеүгә быйыл ғына өлгөштем. Талаптар менән алдан таныш булыуым ҙур ярҙам булды, – ти Гөлнара Юлай ҡыҙы.

“Йыл уҡытыусыһы-2015” бәйгеһенең абсолют еңеүсеһе исеменә Өфө ҡалаһының Калинин районындағы 58-се лицейҙың математика уҡытыусыһы Рима Ронжина лайыҡ тип табылды. Иң оҫта һәм өлгөлө остаз бындай ҙур уңышҡа өлгәшергә ярҙам иткән хеҙмәттәштәренә, уҡыусыларына, ата-әсәһенә сикһеҙ рәхмәтен белдерҙе, башҡа ҡатнашыусыларға үҙ көсөнә, асылына таянып эшләргә кәңәш итте.

– Район, ҡала, республика бәйгеләре бер-береһенә оҡшаш булһа ла, еңеү еңел бирелмәне. Һәр ҡайһыһында яңы тема билдәләнә, маҡсаттар ҡуйыла һәм уларҙың йылдан-йыл тәрәнерәк йөкмәткеле, етди уйландырырлыҡ булыуы һоҡландыра, – тине Рима Рауил ҡыҙы.

Гөлсәсәк ҒӘБИТОВА.

●ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТТАРЫНДА

Сифатлы белем — уңыш сере

Рәсәй Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университетының Өфө филиалы, иҡтисадтың финанс йүнәлеше буйынса белгестәр әҙерләгән юғары уҡыу йорто булараҡ, баҙар ихтыяждарына төшөнөп, тәүгеләр иҫәбендә эш башланы. Филиал директоры, иҡтисад фәндәре докторы, профессор Рафаэль САФУАНОВтан үҙҙәренең эшмәкәрлегендәге яңылыҡтар хаҡында һөйләүен һораныҡ.

Рафаэль Сафуанов “ВТБ-24” банкы бүлексәһе етәксеһе Айҙар Зөбәйеров менән килешеү төҙәй.

— Рафаэль Мәхмүт улы, 2014 йыл Финанс университетының Өфө филиалы өсөн төрлө компаниялар, банктар, дәүләт учреждениелары менән хеҙмәттәшлек тураһында договорҙар һәм килешеүҙәр төҙәү йәһәтенән ярайһы уҡ һөҙөмтәле булды тип әйтергә мөмкин. Һеҙ эшҡыуарлыҡ өлкәһе өсөн белгестәрҙе маҡсатҡа ярашлы әҙерләүҙе күҙ уңында тотаһығыҙмы?

— Әлбиттә, стратегиябыҙҙың асылы — студенттарға иҡтисад һәм финанс өлкәһендә белем биреү генә түгел, ә диплом алғас та теге йәки был фирмала, банкта, дәүләт учреждениеһында эшләргә һәләтле белгестәр әҙерләү. Йәғни беҙ өҫтәмә профессиональ белем биреү алымын ҡулланабыҙ: уҡыу йортонда теоретик белем бирһәк, буласаҡ эш урынында практик тәжрибә туплана. Былтыр Финанс университеты менән Башҡортостан Хөкүмәте араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Ул тотош университеттың кеүәтен республиканы артабан уңышлы үҫтереү мәсьәләләрен хәл итеүгә йүнәлтелә.

Беҙ кредит ойошмалары өсөн белгестәр әҙерләү маҡсатында “Һаҡлыҡ банкы”, “Урал-Сиб”, “Башкомснаббанк”, “Өфө ВТБ 24” менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙәнәк. Уҡытыуҙы быйылдан башлайбыҙ. Ошо маҡсатта республиканың Кредит һәм финанс ойошмалары ассоциацияһына индек. Студенттарыбыҙ теорияны университетта өйрәнһә, практиканы банктарҙа, финанс, страховка ойошмаларында үтәсәк.

— Бындай ғәмәлдәрҙең әһәмиәте нимәлә?

— Банктар хаҡында һүҙ алып барһаҡ, беренсенән, студенттар уның эш үҙенсәлектәренә төшөнә, контроль, курс, квалификация эштәрен башҡарыу өсөн тейешле йүнәлеште һайлау мөмкинлегенә эйә була. Икенсенән, кредит ойошмаһында хеҙмәт эшмәкәрлеген башлағанда әҙер белгестәр тиҙ арала яраклашып китәсәк. Ғәҙәттә, быға өс-дүрт ай ваҡыт кәрәкһә, беҙҙә был мәсьәлә ике аҙна эсендә хәл ителә. Мәҫәлән, “УралСиб”тың корпоратив университетында банктың практик эшмәкәрлеге өйрәнелгән кафедра ойошторою күҙаллана. Өсөнсөнән, филиалды тамамлаусыларҙы эшкә урынлаштырыу гарантиялана. Эшһеҙлек көсәйгән осорҙа был да ҙур әһәмиәткә эйә.

— Был эш теория кимәлендә генәме, әллә күптән ғәмәлгә ашырыламы?

— Әлбиттә, практик һөҙөмтәләр ҙә бар. Хеҙмәттәшлек тураһындағы тәүге килешеүҙе 2013 йылда Рәсәй Һаҡлыҡ банкының Башҡортостан бүлексәһе менән төҙәнәк, “Һаҡлыҡ банкы филиалы” автоматлаштырылған системаһында эшләгән 100 белгесте әҙерләнәк. Студенттарҙан, йәш хеҙмәткәрҙәрҙән һәм уҡытыусыларҙан торған төркөм ошо программа продуктын Һаҡлыҡ банкының Санкт-Петербург бүлексәләрендә лә ғәмәлгә индереү менән шөғөлләнде, 800-гә яҡын хеҙмәткәрҙе эшкә өйрәтте.

Ошондай уҡ алым буйынса Башҡортостандың Финанс министрлығы өсөн дә белгестәр әҙерләйбеҙ. Был учреждение — беҙҙең уҡыу йортон тамамлаған белгестәргә ихтыяжы ҙур булған ойошма. Министрлыҡ системаһында “Башфин” программаһы ҡулланыла. Ул республикала бюджеттан файҙаланған 5 500 юридик берәмектең ихтыяжын тәьмин итә. Был программа “Кей-системс”, “Криста” программалары менән тап килә. Әле беҙ уҡытыусылар әҙерләйбеҙ. Улар киләсәктә студенттарыбыҙға белем бирәсәк, бюджеттан файҙаланыусылар вәкилдәренең белемен камиллаштырыу менән шөғөлләнәсәк. Хеҙмәткәрҙәр әҙерләү буйынса эште Башҡортостандың Торлаҡ һәм төҙөлөш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитеты менән берлектә алып барабыҙ.

Яңы ҡанунитәкә ярашлы идарасы компаниялар лицензия нигеҙендә эшләргә тейеш. Шуға күрә етәкселәргә тейешле квалификация, юриспруденция, иҡтисад, башҡа фәндәр буйынса тейешле белем талап ителә. Бындай хеҙмәтте лә күрһәтәбеҙ.

— Финанс университетының Өфө филиалы студенттарҙы уҡытыу менән генә сикләнеп ҡалмай, республиканың профессионалдарға булған ихтыяжын да ҡәнәғәтләндерә кеүек.

— Эйе, беҙ республика иҡтисадының айырым секторҙары өсөн эшләйбеҙ. Кешенең теоретик белем алып, уны практикала камиллаштырып, эшкә тулыһынса әҙер белгес булып килеүе бик мөһим. Был йәһәттән 2014 йылдың ноябренән беҙҙә практика һәм эшкә урынлаштырыу буйынса махсус подразделение ойошторолдо.

— Эш биреүсенең ихтыяжын иҫәпкә алыу уҡыу пландарына төҙәтмәләр индерергә мәжбүр итәлер, моғайын?

— Әлбиттә. Өҫтәүенә беҙ кадрҙар әҙерләгән ойошмаларҙың һәм предприятиеларҙың теләгә буйынса программалар, дисциплиналар төҙәйбеҙ. Уҡыу пландарын теге йәки был өлкә өсөн ҡабул ителгән һөнәри эшмәкәрлек стандарттары менән яраштырабыҙ. Был стандарттарҙағы бурыстар күләмен анализлайбыҙ, ошо нигеҙҙә белем биреү программаһын төҙәйбеҙ.

Тағы ла бер мөһим нәмәне билдәләргә кәрәк: беҙҙең университетта белем биреү процесында эш биреүселәрҙең вәкилдәре, етәкселәр ҡатнаша. Дәүләт имтихан комиссияларына инә улар. Ҡыҫҡаһы, тығыҙ хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Мәҫәлән, уҡыу йортонда белгестәр әҙерләнгән министрлыҡтар һәм ведомстволар менән курс, диплом эштәренең темаларын яраштырабыҙ, сәнки финанс өлкәһе, иҡтисад, юриспруденция — үҙгәрештәргә йыш дусар булған йәнле тармаҡтар. Беҙҙәнсә, студенттарыбыҙ өсөн тормошобоҙҙа барлыҡҡа килгән әр-яңы йүнәлештәр буйынса мәғлүмәттәрҙе өйрәнеү, анализлау, дөйөмләштереү бик тә файҙалы буласаҡ. Мәҫәлән, шул уҡ кредит ҡулланыусылар кооперативтарын, микрофинанс ойошмаларын ғына алайыҡ. Был, әлбиттә, университеттағы уҡытыусыларға ла белемде камиллаштырыу йәһәтенән билдәле бер бурыстар йөкмәтә.

— Белем биреүҙәге яңылыҡтар өҫтәмә кафедралар асыуҙы, махсус уҡыу программаларын төҙәүҙе талап итәлер?

— Һеҙ ҡаҡлы. Мәҫәлән, төбәк финансы өлкәһендә белгестәр әҙерләү өсөн “Дәүләт һәм муниципаль финанс” уҡыу программаһын тормошҡа ашырыуҙы күҙаллайбыҙ. Хеҙмәт баҙарында башҡарма власть органдарының һәм урындағы үҙидараның финанс хеҙмәттәре, республикалағы һәм муниципаль берәмектәрҙәге контроль-иҫәп органдары ошондай белгестәргә ихтыяж кисерә. Икенсе йүнәлеш — “Хәүефкә анализ һәм иҡтисади именлек”. Вузды ошо профиль буйынса тамамлаусылар финанс-кредит ойошмаларына, дәүләт һәм муниципаль власть органдарына, консалтинг, юридик, аудитор компанияларына эшкә ебәрелә. Киләсәктә кафедралар һанын арттырыу, эш биреүселәрҙең ихтыяжына ҡарап, уларҙың йүнәлешен үҙгәртеү күҙаллана. Башҡа вуздарҙы тамамлаусылар, мәҫәлән, финанс мәсьәләләре менән шөғөлләнәсәк табиптар, уҡытыусылар йәки банк, иҡтисад өлкәһендә эшләгән тәржәмәселәр өсөн ҡайтанан әҙерлек курстарын ойоштороу ҡарала. Ҡыҫҡаһы, заман талаптарына яраклашырға тырышабыҙ.

Гөлсимә СӘЛИХОВА әңгәмәләште.

●ҠАНЛЫ ЙЫЛЪЯҘМА

Олатайҙар аманаты

Бөйөк Ватан һуғышы еле ҡағылмаған ғаилә юҡтыр ул Рәсәйҙә. Кемдеңдер атаһы, икенселәрҙең олатаһы, өсөнсөләрҙең ҡустыһы, яҡын кешеләре йә күршеләре Еңеү өсөн көсөн, йәнен аямаған.

Сәләх Бикембәтов.

Йәләл Рыҫҡолов.

Минең дә олатайҙарым ҡатнашҡан был яуҙа. Атайымдың атаһы – Сәләх Ғилаж улы Бикембәтов олатайым — 1914 йылда тыуған. Һуғыш башланғанда атайыма 4 йәш кенә була. Олатай Ейәнсура хәрби комиссариаты аша һуғыш яланына оҙатыла. Дубиновка тимер юл станцияһында һуңғы тапҡыр күрә уны яҡындары. 1942 йылда Сталинград өсөн һуғышта батыҙарса һәләк булған ҡәҙерле кешебеҙ. Атайым һәр саҡ олатайҙы иҫкә алып, Еңеү көнө етһә, йөрәген усы менән ҡаплап, һыҙланып ултырыр ине. Аҫыл һөйәге тыуған яғынан алыҫта ятһа ла, ул ауған ерҙең тупрағын алып ҡайтып, һуғышта ҡатнашҡан яугирҙәргә ҡуйылған һәйкәлгә һалдылар.

Әсәйемдең атаһын – Йәләл Сәләймән улы Рыҫҡолов олатайымды – шулай уҡ Дубиновканан яуға алып китәләр. Әйткәндәй, ул фин һуғышында ла ҡатнашҡан була. Әсәйем — уның берҙән-бер балаһы. 1943 йылда Ленинград блокадаһы ваҡытында олатайым хәбәрһеҙ юғала. Ошо хаҡта мәғлүмәт алыу менән өлөсәйем әсәйҙе тыуған ауылына – Ейәнсура районындағы Ниязғолға — алып ҡайтып китә. Олатайҙан, хәлдәр еңел түгел, халыҡ күп ҡырыла, аслыҡ, аҙыҡ-түлек боҙ аша ғына килә, тип хат та килгән булған ул. Һиҙенгәндәй, һуғышҡа күҙ йәштәре аша киткән, ти, олатайым. Күрәһең, йөрәге менән тойғандыр инде. Нимә генә тимә, ул бит фин һуғышында яуҙарҙың ни тиклем мәрхәмәтһеҙ икәнлеген үҙ күҙе менән күргән була. Ленинград өлкәһендәге Колпинола туғандар ҡәберлеге бар, олатайҙың ғәзиз һөйәктәре шунда ята.

Минең өсөн Бөйөк Еңеү байрамы — иң тетрәндергес, тулҡынландырғыс байрамдарҙың береһе. Ҡәнәрле һуғыш атайым менән әсәйемде атайһыҙ иткән. Йылдар имен килһен, балалар аслыҡ, һуғыш күрмәһен, тип теләгән һәр саҡ өлөсәй. Миллиондарса халыҡтың ҡанын ҡойған был яу. Илдең именлеген һаҡлау өсөн беҙ ҙә бар көсөбөҙҙө һалһаҡ ине. Улар бит беҙгә тыныс тормошто аманат итеп ҡалдырған!

Руслан БИКЕМБӘТОВ.

Маныштыбатыры

Мәсәғүт Әйүп улы башта телевизорҙы ҡабыҙҙы ла, унан тәҙрә ҡорғандарын ситкә тартып, ябалаҡлап яуған ҡарҙы бер аҙ күҙәтеп торғас, ултырып тапшырыуҙы ҡарай башланы. Электән шулай ғәҙәтләнгән. Ә хәҙер телевизорҙан Бөйөк Ватан һуғышы тураһында йыш күрһәтәләр.

Бала саҡ хәтирәләренә төшөп китте бабай. Атаһын һуғышҡа алып киткәнде төштәге кеүек хәтерләй. Шулай булмай һуң, ни бары өс кенә йәштә ине бит.

...Көтмәгәндә һуғыш тоҡанғас, ир-ат, ғаиләһен, яҡындарын зар илатып, фронтҡа ашыға. Әйүп Хызыр улы ла өс йәшлек Мәсәғүтен, кәләше Орҡояһын ҡалдырып, яуға юллана. Кескәй балаһын – ҡуйынына, һөйөклөһөн ҡосағына алып хушлашҡанда ғәзиздәрен башҡаса күрмәйәсәге, кендек ҡаны тамған Маныштыһына кире әйләнеп ҡайтмаясағы тураһында уйҙар башына ла инеп сыҡмағандыр уның. Ә уйында бары бер теләк – илде дошмандан азат итеү.

Егет алғы һыҙыҡҡа үҙ теләге менән китә. Һуғыштың иң ҡыҙыу мәлендә – хатта сигенгәндә лә — һалдат үҙен аямай, яҡты киләсәк өсөн көрәшен дауам итә. Гитлерсылар Мәскәүгә яҡынлаша башлағас, баш ҡала дошман тырнағына эләкмәһен өсөн ҡаты алыша беҙҙәкеләр. Шул уҡ йылдың 19 декабрендә совет ғәскәрҙәре контрһөжүмгә күскәндә батырҙарса һәләк була Әйүп Хызыров. Көләшенә “хәбәрһеҙ юғалды” тигән ҡайғылы хәбәр килә. Миллионлаған һалдат ерләнгән, ә уның ҡәбере билдәһеҙ...

Ололарҙың һөйләүе буйынса, ул, уҡый-яҙа белмәһә лә, донъя хәлдәре менән ныҡ ҡыҙыҡһынған, күп нәмә тураһында хәбәрҙар булған. Ҙәҙәрәп гармунда уйнағанында, йырлағанында күптәр күҙ йәштәренә ирек ҡуйған. Сослоғо хаҡында ла һоҡланып иҫләйҙәр: айыу кеүек эре йыртҡыс йәнлектәргә генә һунар иткән.

Беҙҙең яҡтарҙа Инйәр йылғаһынан Эҫемгә тиклем һалда йөҙгәндәр. Бер ваҡыт иртән тороп яр буйына килһә, һалдың юҡлығына иғтибар иткән Әйүп Хызыр улы. Киткән йүгереп һыу ағышы ыңғайына. Ғәбдәк ауылына етәрәк бурҙы ҡыуып етеп, ҡаянан һикереп төшкән уның өҫтөнә. Минеңсә, шундай ҡыйыу кеше ҡапылдан юғалырға тейеш түгел. Берәй ҡасан эҙәрмәндәр ошо һалдат тураһында остоҡ ҡына булһа ла хәбәр табыр.

Атаһы хаҡында хәтер Мәсәғүт Әйүп улының ғына түгел, уның балаларының да йөрәгендә мәңге һаҡлана. Ҙәҙәм балаһы гелән ышаныс менән йәшәй. Беҙ, яҡындары, Әйүп Хызыровтың ҡәберен табырбыҙ тип өмөтләнәбеҙ...

Рәшиҙә БАЙРАМҒӘЛИНА.

Белорет районы.